Бөйөк Ватан

## Һуғышы дәуерендәге йырҙар

Иң башына ғына артып аған
Мылтык-кылыс тигән коралын,
Иән-тәндәрен яуҙа корбан итте,
Гитлергә бирмәне Уралын.

Алыҫтарҙан ғына әй күренә
Көркәк тигән тауҙың маяғы;
Кукрәгенә бүлә ук килеп тейгәс,
Иөрөмәне микән уның аяғы?

Биҙгенде лә буйлап йөргәнемдә
Эйелеп бөгөләр ҙә талдары.
Атайҙары китап вафат ба булғас,
Етем калды аның балдары.

Биҙгенде лә буйы әй кәрешкә,
Һауын бейә төшә үрешкә;
Әллә килә тип ук өмөт итәм
Куҙем менән курмәгән эшкә.

Биҙгенделә бесән сапканымда
Төшөп кенә калды яныуым;
Уттары ла яна, һыуҙары юк,
Баҫалмайым йөрәгем ярһыуын.

Биҙгенде лә буйы тумар-тумар,
Тумар өҫкәйҙәре күрәндер;
Ғүмерҙәре булһа киләр ҙә ине,
Вакыттары еткәс, үлгәндер.

Биҙгенде лә буйҙан йөргәнемдә
Сабып кына алдым күрәнен;
Кырк дүртенсе йыл ноябрҙә
Ишеттем мин дуҫым үлгәнен.

Югереп сығып киттем Аскарға,
Билдә һалып киттем юлыма;
Кырк алтынсы йылдың майында
Извещение алдым кулыма.

Биҙгенде лә буйы күләү-күләү,
Күләүҙәре һайын өс өйрәк;
Яна ла үҙәк, көйә лә бауыр,
Нисек кенә түһен ул йөрәк.

Төн уртаһы еткәс, уянып китәм, Сылтылда
Сылтылдапкай һуға ла бер сәғәт;
Уның ғүмеренең кыҫкарыуы
Гитлер дошмандан булды сәбәп.

Итек кенә кейгән, шинель кейгән,
Һары кайыштары билендә.
Аһыл һөйәкәйе ситтә калды,
Кайтып торһа ине илендә.

Утыр типкәй генә урын бирҙем,
Утырманы яҫтык һамағас;
Етем кәҙерҙәрен белмәйҙәр бит
Үҙҙәре лә етем калмағас.

Беҙҙең генә урам уртаһынан
Автамабил үтә туктамай;
Уй-хәсрәттәрем ауыр булғас,
Төнөн уяу ятам йоктамай.

Кайғырамын, ауыр кайғырамын ,
Илап-илап алам далала;
Миңә ир табылыр, кәм-хур бумам,
Ата булмаҫ ике балаға.

Урал ғына буйын йәмдәндерә
Кайын ғына менән карағай;
Минең йәрәгемде яндыра бит
Һөйгән йәрем менән бер ағай.

Көндөҙ генә ата, төнөн коя
Тәҙерәлә үҫкән төн гөлө;
Иәштән етем калып, хәсрәт күреп,
Үлеп китерҙәрем билгеле.

Иртәнсәкәй тороп , әй караһам,
Һыу буйлапкай килә һеләүһен;
Күп теләкәйҙәр ҙә теләгәйнем,
Кабул булманы ла берәүһе.
Югерепкәй мендем әй тауҙарға,
Тау итәкәйҙәрендәге ауҙарға;

Минең

Минең иптәшкәйем китеп ук барҙы
Каршы ла ғына сыккан яуҙарға.
Иҫтәремә төшһә, иҫем дә китә,
Һис бер тәкәт тапмай китәмен;
Ошо кайғы- хәсерәттәр менән
Иәш ғүмерем зая ла үтәһең.
Мендем генә тауҙың әй башына
Утырҙым да һалкын таштарға;
Һуғыш сығып, етем калыуҙары
Килмәһен дә калған йәштәргә.
Әй, дуҫкайым, һиңә һүҙкәйем шул:
Киң дә булһын яткан кәбереӊ;
Якты доньяларҙа йәшәгәндә
Белмәйбеҙ бит дуҫ-иш кәҙерен.
Колхоздарға ғына бесән сабам
Ике еңкәйемде һыҙғаныш;
Етер инде беҙҙең һыҙҙаныуҙар,
Иәрмәһендәр инде һыҙҙанып.
Һауаларҙа оскан аккоштарҙың
Күреп калдым канат какканын;
Иптәшкәйемдең аһыл һөйәкәйен
Күрһәң ине кайҙа ятканын.
Урал тауҙарына менер инем,
Урал таукайҙары бик бейек.Иэн-
Иән-тәндәрен шунда корбан итте
Илебеҙ тыныс йәшәһен, тейеп.

Яуырындарына артып аған
Акуп каҙа торған күрәгеН.
Дошман пулеләре килеп тейгәс,
Баҫып карағандыр йөрәгеН.

Күркәм генә и һәм юрға була
Фронтовиктәрҙең аттары.
Кырк дүртенсе йылдың ноябрендә
Килде һуңғы яҙған хаттары.

Һауаларҙа кигән аккоштар ҙа
Сәләм апкиләме беҙҙәргә;
Шул аккоштар менән мин кушылып,
Иптәшемде китәйем эҙҙәргә.

Фронттарҙан хаттар килде мәллә,
Ниндәй генә хаттар укыйһың?
Һағынамын дуҫтым, һарғаямын,
Кайтмай калыуҙарың бик кыйын.

Кара ла ғына ебәк күлмәгемдең
Ялтырап та тора һиҙәбе.
Кайғы менән йөҙөм һарғая бит,
Дуҫтыкайым, шуны һиҙәңме?

Кара ғына ебәк күлмәгемә
Кәйтән тектем кыҙыл ебәктән;
Иптәшкәйҙең хуш бул тигән һүҙе
Һис тә китмәй минең йөрәктән.

Һары ла көрән сәскәйемдә
Һары таҫма менән үрҙем мин.
Өс мең ике йөҙ һикһән көн эсендә
Ниндәй ауырлыктар күрҙем мин?

Һандуғаскай һайрай һаҙҙарҙа,
Кәүҙәләре аның күренмәй,
Эсекәйем тулы ут ялкыны
Тыштарымдан сығып беленмәй.

Әбйәлил районы Иәнекәй ауылында йәшәгән Мәрфуға Ғиниәтулла кыҙы Дауытованың Ватан һуғышында һәләк булып калған Хашим Дауытовка арнап сығарған йырҙары. 1952 йылдың 12 ауғысында яҙып алдым.

Рәшит Гариф...